

# ҮҘАЛЛЫЛЫҠ ЯУЛАУ ЮЛЫНДА

(халыҡ тарихының героик биттәре)

# ҮҘАЛЛЫЛЫҠ

# ЯУЛАУ ЮЛЫНДА

Уфа - 1998

УДК 78. 072

Үҙаллылык яулау юлында / "АМАНАТ" студияһы, - Өфө, 1998 - 52 бит.

Йыйынтыкта илебеҙ тарихында Рәсәй менән төҙөлгән өс Килешеү тураһында һөйләнелә. Башҡорт халкының үҙ илен, азатлығын һаҡлау өсөн быуаттар буйына барған көрәше хикәйәләнә һәм уның халык йырҙарында сағылыуы күрһәтелә.

Составитель: Сулейманова С.Г.
Редактор: Гафаров И.А.
Верстка: Алтынбаев Р.Ш.

Подписано в печать 23.05.98. Формат 60х84/16. Бумага офсетная № 1.
Печать офсетная. Усл. изд. л. 2,29. Усл. печ. л. 2,79. Тираж 100 экз.
Отпечатано в РА "Информреклама", 1998г.
Лицензия № 0147. № 026 Минпечати РБ.

© Редакционно-издательский отдел студии "АМАНАТ"™



# Үҙаллылыҡ яулау юлында

Республикабыҙ, беҙҙең тыуған илебеҙ, 11 октябрҙә шаулан-горлап дәүләт суверенитеты, йәғни үҙаллылыҡ көнөн байрам итһә, 24 декабрь көнө үҙенең Конституцияһы көнөн билдәләй.

Үҙаллылыҡ яулап алыу республикала йәшәгән бөтә халыҡтар өсөн дә ил азатлығы, тиң хоҡуҡлылыҡ, иҡтисади һәм сәйәси үҙаллылыҡ, барлыҡ милләттәрҙең татыулығы һәм хеҙмәттәшлеге, тел һәм мәҙәниәттең үҫеше, фәндең бөтә тармаҡтарының алға китеүе һәм башҡа ыңғай күренештәргә киң ҡолас алыу булды. Һис шикһеҙ, суверенитет алыуҙың ыңғай һөҙөмтәләрен дә күрә башланыҡ.

Әлбиттә, халҡыбыҙ тарих майҙанында үҙ урынын һәм хоҡуҡтарын яҡлап, ерен-һыуын һаҡлау өсөн тиңһеҙ көрәштәргә күтәрелеп, бихисап ҡорбандар биреп, әҙәм иҫәре күтәрә алмаҫ яфаларға дусар булып, ысын азатлыҡты икенсе торлорәк күҙ алдына килтергәндер. Ләкин барыһы ла ҡатмарлы тарих ҡушыуы буйынса бара.

Билдәле булыуынса, башҡорттар һоҡланғыс тәбиғәтле ҙур илдә йәшәгәндәр. Башҡорттар тураһында иң боронғо яҙма мәғлүмәт беҙҙең эраға тиклемге V быуатта Геродот әҫәрҙәрендә бирелгән (Геродот - боронғо грек тарихсыһы, уны "тарихтың атаһы" тип

йөрөткәндәр). Ә II быуатта Птолемей Клавдийҙың (боронғо грек астрономы) картаһында Урал йылғаһы күрһәтелгән. 992 йылда ғәрәп сәйәхәтсеһе һәм яҙыусы Әхмәт Ибн-Фаҙлан башҡорт илендә булып: "Волганан (Иҙелдән) Тубылға тиклем бик киң ерҙәрҙә башҡорт тигән халыҡ йәшәй", - тип яҙып ҡалдырған.

Иҫе-буйы меңәр саҡрымдан артҡан ошо иркен ерҙе башҡорттар, М.Өмөтбаев әйтмешләй, "Азиянан Европаға туҡтауһыҙ ташҡын кеүек ағылған һәм үткән ерҙәрендәге бөтә нәмәне емереп юҡҡа сығарған халыҡтарҙан ҡурсалап, һаҡлап торған".

Ул дәүерҙәрҙә башҡорттарҙың үҙ дәүләте булған... Шул осорҙа уҡ башҡорттоң үҙаллы иле булған, шул илендә торған ерҙән ул тирә-яҡтағы халыҡтарҙың эшенә актив ҡатнашлыҡ иткән. Башҡорт дәүләтенең башында хан торған. Ҡайһы бер хандарҙың исеме лә билдәле: Сәмәр хан, Мәсем хан, Тора хан, Күсем хан һ.б.

Ҡасандыр башҡорттоң 70-80 ҡалаһы булған. Уларҙан Ҡараҡыя, Минжан, Мазира, Ҡазира, Башҡорт, Борйән тигәндәре XI-XII быуат ғәрәп мәғлүмәттәренән билдәле.

Ә башҡорт теле Мәхмүт Ҡашғариҙың 1073-1074 йылдарҙа тамамланған "Төрки телдәр һүҙлеге" тигән китабында иң ныҡ билдәле төрки телдәр иҫәбенә индерелгән.

XIII быуат баштарында Башҡортостан Болғар ханлығы менән союзда торған, һәм 1223 йылда улар татар-монголдарҙың еңелмәҫ сиреүен (ғәскәрен) сигенеп ҡасырға мәжбүр иткән.

Әммә 1229, 1230, 1232 йылдарҙа Башҡортостанға бер-бер артлы һөжүм яһала; башҡорттар ҡаты ҡаршылыҡ күрһәтә.

Тик 1236 йылдың көҙөндә хәрби хәйлә арҡаһында ғына Башҡортостанға үтеп инәләр.

Татар-монголдар бөтә Башҡортостан буйынса аяуһыҙ ҡан ҡойорға тотонған. Улар шулай эшләгән: ҙур сиреү (ғәскәр) менән бик киң ерҙең халҡын ҡырып, ҡалғандарының барыһын, сабый балаларға хәтлем, үҙ яугирҙәренә бүлеп биргән, шунан һәр яугир, өлөшөнә тейгән кешеләрҙе бәйләп, йөҙөнокләтеп теҙеп, ҡылыс менән берәм-берәм баштарын сабып өҙгән.

Халыҡты тотош ҡырыу, ҙур-ҙур өлкәләрҙе ҡыйратып харабаға ҡалдырыу татар-монголдар өсөн яу сараһы булған.

Халыҡты бөтөрөүҙән тыш, улар ҡала һәм тораларҙы емергән. Шундай ҡырағайлыҡ арҡаһында башҡорт ҡалалары ер йөҙөнән юҡ ителгән. Тотҡонлоҡҡа эләккән ир, ҡатын, бала-сағаны меңәрләп-меңәрләп ҡоллоҡҡа һатҡандар. Ҡоллоҡҡа һатылған ҡыпсаҡ, башҡорт Сүриәгә, Мысырға (Египетҡа) ебәрелгән.

"Алтын Урҙа коллого аҫтында 300 йыл буйы йәшәү башҡорт халҡын 10 тапҡырға кәметкән", - тип яҙа ғалим Әкрәм Бейеш. Халыҡ, көн итер мал-мөлкәте бөтөп, һуңғы сиккә тиклем бөлгән. "Хакимдәре тарафынан таланып һәм тамам бөлдөрөлөп, йәнлек һәм балыҡ тотоп ҡына тамаҡ туйҙырғандар, - тип яҙған башҡорттар тураһында Петр Иванович Рычков (1712-1777 й.й., рус тарихсыһы, географы, экономисы, Башҡортостан буйынса бай-таҡ тикшеренеүҙәр алып барған). -Шул хәйерсе хәлендә улар Ҡазан һәм Себер хандары ҡулына эләккән, был хандар уларҙы тағы ла ныгыраҡ бөлгөнлөккә төшөргән, кос еткеһеҙ һалымдар һалған".

Ошолай ауыр хәлдә ҡалған башҡорттоң, яҡынлап килгән урыҫ һөжүменә ҡаршы тороп, илде һаҡларлыҡ көсө булмаған. Шуның өсөн халҡыбыҙҙың аҡыллы ирҙәре кәңәш ҡороп, Урыҫ дәүләтенә вассалитет (буйһоноу) шарты менән ҡушылырға һәм, күпмелер сикләнгән булһа ла, уҙаллылыҡ алырға ҡарар иткән.

Шулай итеп, башҡорттар менән Рәсәй дәүләте араһында беренсе килешеү XVI быуат уртаһында төҙөлә.

Шуны әйтеп китеү кәрәк: тарих фәнендә башҡорттарҙың Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуының характеры (үҙ теләге менәнме әллә көсләнме) тураһында, "Башҡортостан" энциклопедияһында әйтелгәнсә, бер төрлө генә фекер юҡ. Әгәр Витевский Владимир Николаевич (1845-1906), Ищериков Петр Федорович (1892-1961), Чулошников Александр Петрович (1894-1941), Башҡортостан Рәсәй дәүләте тарафынан баҫып алынған, тип яҙһалар, Новиков Валентин Аполлонович (1837-1880), Рычков Петр Иванович (1712-1777), Татищев Василий Никитич (1686-1750), Усманов Әбүбәкир Нурманович (1910-1982), Әсфәндиәров Әнеүәр Зәкирович (1934) кеүек ғалимдар, Башҡортостан Рәсәйгә үҙ ирке менән ҡушылған, тип иҫәпләйҙәр.

Нисек кенә булмаһын, башҡорттар менән Рәсәй араһында килешеү төҙөлә. Был килешеү үҙенсәлекле формала - Иван Грозныйҙың башҡорт ҡәбиләләренә биргән "Жалованная грамота" формаһында төҙөлә. Жалованный грамоталар беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланмаған, әммә уларҙың йөкмәткеһе башҡорт ҡәбиләләре шәжәрәләрендә һаҡланған. Улар буйынса килешеү шарттарын асыҡларға мөмкин булған.

Был шарттар буйынса <u>урыҫ хөкүмәте</u>:

1. башҡорттарҙың үҙ еренә аҫабалығын (нәҫелдән нәҫелгә эйә булыу хоҡуғын) таныған; бөтә ерҙәрен уларҙыҡы итеп һаҡларға вәғәҙә иткән;

башкорттарға тыныс тормош, уларҙың элекке хакимдары-м күрше күскенсе ҡәбиләләр баҫып инеүенән һаҡлауҙы га-лаган;

башҡорттарҙың диненә теймәҫкә һәм көсләп башҡа дингә эҫкә вәғәҙә итә;

урыҫ батшаһы башҡорттарҙың эске тормошона лаҫка йөкләмә ала, урындарҙа идара итеү башҡорт бейҙәре, дары, кенәздәре ҡарамағына ҡалдырыла.

ашҡорттар үҙ яғынан:

Рәсәй дәүләте составына тыныс юл менән инә;

үҙ иҫәптәренә хеҙмәт атҡарырға, алыҫ һәм яҡын поход-катнашырға, күсмәнде халыҡтар яуынан дәүләттең көньяҡ-ыш сиктәрен һаҡларға йөкләмә ала;

батша ҡаҙнаһына бал, һыуһар, ҡондоҙ, ҡама тиреләре яһаҡ түләргә тейеш була.

атшанан алынған Грамота нигеҙендә башҡорттар ерҙе үҙ-ара ыуға бүлешеп файҙаланғандар. Ил-йорт тыныс булған.

ло тарихи ваҡиғаны сағылдырып, башҡорттар "Ете ырыу" йыр сығарғандар. Уны урыҫса "Семирод" тип атағандар. рыу" йырында тыуған илебеҙ Уралдың гәзизлеге, гүзәллеге, та-бабаларыбыҙҙан беҙгә күсә-бирелә килеүе бәйән ителә:

Күгәренкәй ятҡан Урал тауын
Урап ята башҡорт далаһы.
Йырҙарын күп һинең, моңдарың күп,
Әйҙә йырла, башҡорт балаһы.

Саңҡып та ғына саңҡып, ай, ҡысҡыра
Урал тауҡайының шоңҡары.
Яҫы ғына яурын, киң күкрәкле
Урал егетенең толпары.

Урал да ғына Урал, ай, тиһегеҙ,
Урал буйы ҡыҙырым сауҡа икән.
Уралкайҙы маҡтап бер йырлаһаң,
Күңелдәргә үҙе лә зауҡы икән.

экин артабан, XVII быуаттан алып башҡорт ерҙәрен баҫып колонизациялау башланғас, "Ете ырыу" йырының нигеҙҙә үҙ

койо һаҡланһа ла, тексы үҙгәрә, һәм ул "Урал" исеме менән йырлана башлай. Шуға ла "Урал" йыры китаптарҙа ике вариантта йөрөй.

Икенсе варианты иһә башҡорттарҙың тыуған иле, ере өсөн йән аямай көрәшеүе, тыуған иленә тоғролоғо, халыҡтың батырлығы, саялығына гимн булып яңғырай. "Урал" йырының 2-се варианты - ул халыҡтың койгә һалынған тарихы ла, киләсәк быуындарға васыяты ла.

Үрҙә әйтелгәндәрҙең барыһы ла һыйған был тетрәткес юлдарға!

Күгәренкәй ятҡан Урал тауы -
Ата-олатайҙарҙың да төйәге.
Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған
Шунда ята батырҙар һөйәге.

Ай Уралым, һинән ҡырҡып алһам
Ат ҡыуырҙай яңғыҙ ҙа талдарың,
Тамып та ғына ҡала, ҡырҡҡан саҡта,
Яуҙа үлгән батыр ҙа ҡандары.

Уралдан ғына бейек, ай, тау булмаç.
Уралкайҙы һөймәç тә йән булмаç.
Үҙ илкәйе өсөн ҡорбан булған
Ир-егеттең ғүмере йәл булмаç.

Яҡшы атҡа менеп, ҡулына алған
Уҡ-һаҙаҡҡай тигән ҡоралын.
Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын.

## Башҡорт яуҙары

Был империяны гиҙеп сыҡтым -
Башҡортомдан батыр юҡ икән.

Азатлыҡ өсөн көрәш, уның менән бәйле ваҡиғалар һәм бөйөк шәхестәр - халҡыбыҙҙың тарихи йырҙарының үҙәк темаһы. Сөнки башҡорт халҡы өсө быуат ярым буйы ҡанһыҙ баҫҡынсыларҙың

йыртҡыслығынан ҡаты ғазап сиккән, йән аямай ғәҙеллек өсөн, азатлыҡ өсөн, тыуған ил өсөн көрәшкән. Халҡыбыҙҙың тарихы ла, нигеҙҙә, ошо көрәш һәм ғазаптар тарихынан ғибәрәт. Шуға ла беҙҙең боронғо классик оҙон көйҙәребеҙ бөтәһе лә һүҙ менән әйтеп бирә алмаҫлыҡ, тик йөрәк менән генә аңларлыҡ моң-зар менән һуғарылған.

Әҙ генә тарихҡа байҡау яһап үтәйек.

Беренсе үҙаллы башҡорт яуы 1645 йылда булған. Ул төньяк-көнбайыш башҡорттары үҙ ерҙәрендә Минзәлә ҡалаһын төҙөүгә һәм ғөмүмән урыҫ политикаһына ҡаршылыҡ күрһәтеү нигеҙендә килеп сыҡҡан.

1662-1664 йылдарҙа бер туған Ҡонҡас һәм Дәүәнәй старшиналар, Ишмөхәмәт менән Һары Мәргән батырҙар етәкселегендә башҡорттарҙың тағы берҙәм күтәрелеше була. Ул урыҫ хөкүмәтенең көслө баҫҡынсылығына ҡаршы башлана.

Артабан 1670-1671 йылдарҙа башҡорттар Степан Разин етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышында ҡатнаша.

1681-1684 йылдарҙа Сәйет Саадир етәкселегендә башҡорттарҙың оҙайлы һәм ҙур баш күтәреүҙәренең береһе ("Сәйет яуы") булып үтә. Был баш күтәреү батшаның Урта Волга буйы халыҡтарын көсләп суҡындырыу тураһындағы 1681 йылдың 16 майындағы указына ҡаршылыҡ күрһәтеү була, сөнки был указдың шауҡымы Башҡортостанға ла килеп етә.

1704-1711 йылдарҙа Алдар һәм Күсем батырҙар етәкселегендә башҡорттар 7 йыл буйына баш күтәрә. Төп сәбәбе - Петр I-сенең агрессив политикаһы арҡаһында башҡорт ерҙәрен талау, баҫып алыу, унда заводтар төҙөп, урыҫ һәм башҡа халыҡтарҙы, башҡортто ҡыуып, күсереп ултыртыу һәм башҡа вәхшилектәр булған.

Был восстание ла, башҡалары кеүек үк, аяуһыҙ ҡаты баҫтырыла.Уның етәкселәренең береһе Моратты ҡаты язалап, тимер ырғаҡҡа ҡабырғаһынан аҫалар. "Үлтерергә, тотҡан ерҙә аҫырға, ысын дошман һымаҡ итеп ҡырырға, бөтөн яҡлап ҡотон алырға",- тигән бойороҡ бирелгән. "10 йәштән өлкән башҡорттоң башын киҫергә, 10 йәштән кеседенең эсен ярырға" бойоролған. Башҡорт ауылдары яндырылған, халыҡ ҡырылған, мал-мөлкәт таланған.Урыҫ хөкүмәте башҡортто бөтөрөү өсөн бөтә көсөн һалған. Ул үҙ ғәскәренә һәм ирекле төркөмдәргә һис бер йыртҡыслыҡтан тартынмаҫҡа ҡушҡан.

1704-1711 йылғы яуҙарҙан һуң 4-5 йыл үтеүгә урыҫ хөкүмәте башҡорт илендә яңынан мәғдән заводтары һалырға керешкән. 10 йыл эсендә генә 14 завод һалынған. Яңы ҡалалар һәм ҡәлғәләр

тоҙоу ҙә дауам иткән.Башҡорт ерҙәре күпләп тартып алынған. Ер мәсьәләһе ғәмәлдә ботә башҡорт тартышы һәм башҡорт яуҙарының төп сәбәбе булған.

1735 йыл тағы ҡанлы яу башланып киткән. Урыҫ хөкүмәте Башҡортостандың ботә яғына каратель командалары ебәргән. Уларҙың башлыҡтары, Әкрәм Бейеш әйткәнсә, "ҡан эскес палачтар" Кириллов, Тевкелев, Румянцев, Татищев булған. Улар бар халыҡҡа аяу белмәй яуызлыҡтар ҡылғандар, мәҫәлән: әле бик кәметеп күрһәткән мәғлүмәттәр буйынса, 1736 йылдың яҙында ғына 3042 кеше үлтерелгән, 503 ауыл яндырылған, 3200 баш ат, 1000 баш һыйыр ҡыуып алып кителгән һ.б. яуызлыҡтар ҡылынған.

Иң аҫыл кешеләрен һәм иҫәпһеҙ күп халҡын юғалтыу әсеһенән, залимдарҙың ҡанлы хөкүменән түҙә алмаҫ сиккә еткән башҡорт халҡы ботә йән асыуы менән хас дошманға ҡаршы үлемесле һуғышҡа сыҡҡан. Яу менән 32 йәшлек Ҡараһаҡал (ысын исеме Миңдеғол Юлай улы) етәкселек иткән.

Ғайса Хосәйеновтың һүрәтләүе буйынса, "Ҡараһаҡал"-алыштарҙа ал бирмәҫ батыр, һүҙ ярыштарында иң оҫта сәсән, яуҙа иң яугир, уҡымышлылар араһында - ҙур ғилем эйәһе, хатта "аҫыл заты" менән хан булып танылған уҙаман булған.Ул ҡаҙаҡ, үзбәк, ҡалмыҡ, ғәрәп, фарсы телдәрен туған теле кеүек белгән".

Ҡараһаҡал етәкселегендә башҡорттар һуғышҡа дәррәү күтәрелгән. Ләкин, көстәрҙең тигеҙ булмауы арҡаһында, әлбиттә, улар еңелеүгә дусар булған.

Карателдәр башҡорттарҙы аяуһыҙ ҡырған. Ҡанһыҙ рәүештә язалауҙар башланған. 1740 йылдың 25 авгусында Ырымбур төбәгенең яңы башлығы булып килгән суҡынмыш (суҡынған) татар Урусов көсләп йыйылған халыҡ алдында ҙур яза ойоштороған: 5 кешене тимер ҡаҙыҡҡа ултыртҡан, 11 кешене ҡабырғаһынан тимер ырғаҡҡа элгән, 85 кешене аҫҡан, 21 кешенең башын сапҡан.

17 сентябрҙә ул тағы 125 кешенең башын киҫтертә, бик күптәрҙе аҫтырта, 301 кешенең ҡолағы менән танауын ҡырҡтыра.

Йыйып әйткәндә, 1735-1740 йылдарҙа 40 меңләп кеше һәләк була, 7 мең ярым кеше язалап үлтерелә, 3 меңдән ашыу һөргөнгә ебәрелә, 6 мең ярым ҡатын-ҡыҙ ҡол итеп таратып бирелә, 17 мең йылҡы һәм һыйыр малы тартып алына, 600-ләп башҡорт ауылы яндырыла.

Ошондай йыртҡыслыҡтарҙы күҙ ҙә йоммай эшләгән башкиҫәктәрҙең береһе Тевкелев була. Тевкелев - Мырҙа Ҡотломохәммәт тигән татар булған, суҡынғандан һуң Алексей Иванович Тевкелевҡа әйләнгән.

Уға ҡарата сығарылған "Тәфтиләү" йыры килер быуындар уҡырлыҡ һәм ишетерлек ләғнәт булып яңғырай; халыҡ уға ҡарғышты ташҡа ғына түгел, ә кеше күңелдәренә мәңгегә яҙып ҡалдырған.

Иҙел буйҡайҙары, ай, ҡаялыҡ-
Полковник Тәфтиләү яу урыны.
Башҡорт илкәйҙәрен утҡа тотҡас,
Алтынланды уның яурыны.

Аҫтындағы эйәр атҡа тейер,
Эйәре лә белмәҫ, ат белә.
Тәфтиләүҙең ҡылған, ай ҡәһәрен
Үҙе белмәһә лә, ил белә.

Ел елләмәй, томан, ай, асылмаҫ.
Йыр йырламай, күңел асылмаҫ.
Полковник Тәфтиләү түккән ҡандың
Асыуҙары тиҙ үк баҫылмаҫ.

Ҡайнап ҡына аҡҡан Иҙел аша
Тәфтиләүҙәр кисеү таба (а)лмаҫ.
Ир-егеткәйҙәрҙең, ай, өмөтөн
Тәфтиләүҙәр генә быуа (а)лмаҫ.

Ҡара ла ғына урман, ҡая бите,
Шаулайҙыр ҙа кисен, ел саҡта.
Ташҡайҙарға соҡоп яҙҙым ҡарғыш,
Ейәндәрем уҡыр бер саҡта.

## 1755 йылдағы яу
## Батырша

Мин - тотҡон Батырша,
Башҡорттоң батыры,
Ултырам зинданда,
Башымды ҡатырып ...
Р. Ғарипов.

1740 йылғы яуҙа башҡорт халҡы үтә ауыр һәләкәткә дусар булған. Халыҡтың арманһыҙ хәленән файҙаланып, урыҫ администрацияһы, башҡорттарға ҡаршы төрлө ҡот осҡос саралар билдәләп, уларҙы тормошҡа ашыра башлай.

Волость башлыҡтары итеп күбеһенсә батша "ғали йәнәптәренә тогро" мишәрҙәр ҡуйыла; улар инде батшалыҡтың ысын агенттарына әйләндерелә, башҡорт ауылдарының бөтәһенә лә есаул (яҫауыл - элекке Рәсәйҙә офицер дәрәжәһе һәм шул дәрәжәне йөрөткән кеше, пехотала капитан дәрәжәһенә тура килгән), сотник (революцияға тиклемге Рәсәйҙә казак ғәскәрендә регуляр ғәскәрҙәге <u>поручик</u> дәрәжәһенә тиң гәскәри дәрәжә һәм шул дәрәжәләге кеше), писарь итеп мишәр ошаҡсылары ебәрелә. А.П.Чулошниковтың "Восстание 1755 года в Башкирии" тигән китабында әйтелеүенсә, улар (мишәрҙәр) башҡорт халҡына сикһеҙ яуызлыҡтар ҡылған, халыҡ малын ашаған, эсеп ҡоторған, кешене ҡылыс менән сапҡылаған, ҡулдарын сабып өҙгән һәм шуның һымаҡ иҫәпһеҙ йыртҡыслыҡтар эшләгән. Бөтә башҡорттар күҙәтеү аҫтына алынған. Улар хатта ҡырға һунарға сыҡһа ла, "махсус сығарыу ҡағыҙы" буйынса ғына йөрөй алған.

Ҡыҫҡаһы, башҡорттарҙың бөтә эске тормошо батша администрацияһына буйһондоролған.

Бөлгөнлөктөң сигенә еткән халыҡты талау туҡталмаған. Ерҙәр һаман баҫып алына барған, заводтар төҙөү дауам иткән.

Башҡорттарҙы күпләп даими хеҙмәткә ала башлағандар; башҡорттар ике ат менән, тотошлай үҙ тәьминәтендә, ҡаҙнанан һис бер ярҙам алмайынса хеҙмәт иткән. Унан тыш, халыҡҡа бик күп йөкләмә үтәргә кәрәк булған.

Шуларҙың өҫтәүенә урыҫ хөкүмәте тағы көсләп суҡындырыу политикаһын үткәрә башлаған.

1754 йылдың 16 март указы менән башҡорт ерендә сығарылған тоҙҙо башҡорттар һатып алырға тейеш булған.

Ошо яуызлыҡтарҙан түҙемлеге сиктән сыҡҡан башҡорттар яуға әҙерләнә башлаған. Шул ваҡытта мишәр муллаһы Абдулла

Әлиев (аҙаҡ Батырша тип йөрөтөләсәк) пәйҙә булған. Кисҡен хәлде файҙаланып, ул ислам дине өсөн алыш башларға, уға бөтә мосолман халҡын, шул иҫәптән мишәрҙәрҙе, йәлеп итергә уйлаған. Абдулла Әлиев, Башҡортостанды гиҙеп, өндәмә таратып, төрлө милли һәм территориаль төркөмдәрҙе килештерә башлаған. Ләкин мишәрҙәр, "колонизаторҙарҙың ғүмерлек тоғро ялсылары" (Ә.Бейеш), ҙур ихласлыҡ белдермәгән, ә башҡорт артына ышыҡланырға тырышҡан.

Дөйөм ҡоралды сығыш 1755 йылдың 15 майында, билдәләнгән көндән ай ярым элек, таш эҙләргә ебәрелгән Брагиндың йәберләү һәм мәсхәрәләүҙәренә түҙә алмаҫ сиккә еткән Бөрйән волосы башҡорттарының ҡапыл баш күтәреүенән башланған. Брагин, Талҡаҫ күлендә кәмәлә йөҙөп йөрөгәндә, Әмин батыр уны Ирәндектән тороп уҡ менән атып үлтерә. Ҡанлы яу ошонан башланып киткән. Ҡыҫҡа итеп әйткәндә, Ырымбур төбәгенең башлығы Неплюев Иван Иванович (1693-1773) шундай бойороҡ биргән: "Яуыздарҙы аҡылға ултыртыу, ә ҡалған тәреһеҙҙәрҙең ҡотон алыу өсөн өйҙәрендә тамырҙарын табырға һәм, бер нәмәһен йәлләмәй, тамыры менән юҡ итергә, "ҡасҡан яуыздарҙан" кем ҡалған - ҡатындарын, ағай-энеләрен, балаларын, туғандарын - барыһын да тотоп Ырымбурға килтерергә, мөлкәттәрен тотош тартып алырға, малдарын хәрби кешеләргә аҙыҡҡа таратырға". Әммә көньяҡ-көнсығыш Башҡортостан, төньяҡ-көнбайыш Башҡортостандың Ғәйнә волосы (хәҙерге Пермь өлкәһе) тиҙ арала дәррәү күтәрелеп сыҡҡан. Ә Батырша, нисек кенә уҡымышлы, тоғро мосолман булмаһын, яу менән етәкселек итмәгән, үҙ мишәрҙәрен хәүефтән һаҡлап, ғәйнәләргә вәғәҙә иткән ярҙамын да ебермәгән һәм иң яуаплы мәлдә ул, урманға ҡасып, йәшенеп ятҡан. Әлбиттә, башҡорт яуы еңелгән. Әлбиттә, халыҡты аяуһыҙ ҡырыу һәм ҡот осҡос язалау башланған.

Ә Батыршаны, мәсеттә йәшенеп ятҡанда, үҙ мишәрҙәре тоттороп бирә, һәм Батырша Шлиссельбург төрмәһенә ябыла. Унда ул 6 йыл ултырып, батшабикә Елизавета Петровнаға 103 биттән торған хат яҙып, 1762 йылдың 24 июле төнөн, бығаулы көйө бер үҙе баш күтәреп, һаҡсылар мылтығынан атылып, тиңһеҙ алышта аяҡ өҫтө батырҙарса йән бирә.

Был баш күтәреү тураһында Ғайса Хөсәйеновтың "Ҡанлы 55" тигән тарихи яҡтан үтә ҡиммәтле, ғәжәп бай тел менән яҙылған бик шәп романы сыҡты.

Батырша тураһында халыҡ йә йыр сығармағандыр, йә һаҡланмағандыр.

## Бүгәс - Салауат яуҙары
## 1773-1775 йылдар

Пугачевы менән Салауатым,
Сапсындырып суйын саптарын,
Сәсән теле менән сәмләндереп,
Мәңгелеккә әйҙәр сафтарын! ..
Р.Ғарипов.

Башҡорт яуҙары гел генә уңышһыҙлыҡ менән бөтөп торһа ла, колонизаторҙар баҫып алған ерҙәрендә үҙҙәрен тыныс тоя алмаған. Шуға күрә, күпләп ҡәлғә төҙөүҙән тыш, улар һәр урыҫ ҡалаһын, заводын, ауылын ысын хәрби нығытмаға әйләндергән: текә ыуалдар, тәрән урҙар (тәрән итеп ҡаҙылған тар, оҙон соҡор), ныҡ ҡоймалар менән ураткан һәм атар туптарын, ҡорал-ярағын, дарыяһағын һәр ваҡыт әҙер тотҡан.

Башҡорттарҙа колонизаторҙарҙы ҡурҡытырлыҡ көс һаман да булған әле. Шул ҡурҡыныстан ҡотолоу, "элекке балаларҙың ҡабатланыу мөмкинлеген мәңгегә бөтөрөү", башҡорттоң көүәтенең тамырын бөтөрөү маҡсатында батша етәкселегендәге махсус комитет башҡорт ерҙәрен Рәсәй ҡулына, юридик рәүештә нығытып, күсерергә, ә уның өсөн заводсыларҙың баҫып алғанын мәңгелеккә "үҙ ирке менән биргән" йәки "һатҡан" тигән ҡағыҙ менән һаҡларға ҡарар иткән. Ер һатыу аҫаба башҡорттар менән бөтөнләй һөйләшмәгән көйө башҡарылған.(Аҫаба - ғәрәп һүҙе: нәҫелдән күсә килгән ерҙең хужаһы).

Ерҙе күрәләтә талағандар. Салауат яуына тиклем башҡорт еренең 3 766 659 дисәтинәһе (десятина - 1,09 га; тимәк, 4 106 000 гектар) заводтарға күскән, шуның күпселек өлөшө 50-55-се йылдарҙан һуң баҫып алынған. 2 429 547 дисәтинәһен алпауыттар (помещиктар) ҡулға эләктергән. Унан тыш 4 138 881 дисәтинә ер ҡәлғәләргә (крепостарға) тартып алынған.

Башҡорт ерҙәрен тартып алыуҙа килмешәктәр ҙә ҙур тырышлыҡ күрһәткән.

Шулай итеп, башҡорттар иң мөһим, хужалыҡ өсөн иң кәрәкле ерҙәрен юғалтҡан. Шул арҡала бик ауыр экономик хәлгә ҡалған.

1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы тип аталған оло яу алдынан башҡорттоң хәле бына шулай булған.

Бүгәс

1773-1775 йылғы яу Яйыҡ казактарының күтәрелеүенән башланған. Ошо ваҡытта Яйыҡ буйына ҡасҡын Дон казагы Емельян Пугачев килеп сыҡҡан. Бер нисә ышаныслы казак алдында ул үҙен ябай халыҡты, бигерәк тә казактарҙы яҡлаған өсөн ҡатыны Екатерина II-нән яманлыҡ күргән “император Петр III” тип таныҡҡан. Ул казактарҙы үҙенә хеҙмәткә саҡырған. Яңынан ҡалҡыр өсөн етәкләр башлыҡ ҡына көтөп торған казактар “императорға” хеҙмәт итергә риза булған.

Пугачев бөтә иҙелгән халыҡтарға яңы манифесттар тарата башлаған. Манифесҭтарында ул һәр халыҡҡа иң мохтаж нәмәһән вәғәҙә иткән, шунан тыш бөтәһәнә лә ер, мәңгелек ирек өләшкән.

Кем булған һуң ул Пугачев?

Емельян Иванович Пугачев яҡынса 1742 йылда Зимовейская-на-Дону станицаһында тыуған. 1756-1763 йылдарҙағы Ете йыллыҡ һуғышта, 1768-1770 йылдарҙа урыҫ-төрөк һуғышында ҡатнаша. 1770 йылда ул хорунжий (башҡортса - харунья, түбәнге офицер дәрәжәһе) чинына күтәрелә. 1773 йылғы баш күтәреүгә нәк бер йыл тигәндә, Пугачев ҡулға алына һәм 1775 йылдың ғинуарында Мәскәүҙә язалап үлтерелә. Был ваҡытта Пугачевҡа ни бары 33 йәш тирәһе генә була.

Шул иғтибарға лайыҡ: Пугачев тураһында урыҫтар, нык тыйылған булғанғалыр, йыр ижад итмәгәндәр.

Башҡорт илендә лә исеме бик ҡаты тыйыу аҫтында булһа ла, халҡыбыҙ Бүгәс батша тураһында йырҙар сығарған һәм ике быуат буйына уларҙы һаҡлап килгән.

Шуларҙың береһен 1961 йыл яҡташыбыҙ, фольклорсы-ғалим (хәҙер ул фән докторы, профессор) Салауат Галин Һарытау өлкәһенең Пугачев районы Ҡондоҙло ауылында йәшәүсе Мөхтәров тигән ағайҙан яҙып алған. Ошо уҡ йырҙы атаҡлы Ғата ағай Сөләймәнов бер ҡарт бабай ауыҙынан тыуған яғында ла яҙып алған, уны нотаға һалып, йырлау үрнәге биреп ҡалдырған.

“Бүгәс” (йәки “Бүгәс маршы”) йырында Бүгәс батшаның батырлығы, дошманына аяу белмәй һуғышыуы бәйән ителә, көрәштең маҡсаты һәм ыҡсым ғына итеп уның программаһы атап әйтелә.

Оло ғына, һай, юлдан ғәскәр килә,
Арғымаҡтарын да уйнатып,
Оло ғына, һай, юлдан Бүгәс килә,
Дошман ғәскәрҙәрен, шул, ҡыйратып




# PALDISKI, ҺИНДӘ ЯТА БАТЫР ҺӨЙӘГЕ




Салауат Юлаев һәйкәле. Эстония. Палдиски ҡалаһы.

Оло ғына, һай, юлдан ғәскәр килә,
Һауаларға оса, шул, туҙаны,
Бүгәс батша, һай, яуыз түрәләрҙе
Ҡуй-һарыҡтай итеп тә тураны.

Оло ғына, һай, юлдан ғәскәр килә,
Бүгәс батша икән, шул, хужаһы.
Яуыз түрәләрҙе ҡырып боткәс,
Бөтмәҫ микән илдең нужаһы.

Оло ғына, һай, юлдан Бүгәс килә,
Ебәк билбауын быуып биленә.
Баяр, түрәләрҙән тартып алып,
Ер-һыу бирә икән иленә.

## Салауат батыр

Аҡмағандай кире Ағиҙелкәй,
Сүкмәгәндәй ергә Уралтау,
Салауаттың йыры тынмаҫ илдә,
Еңә алмай рухын ҡорал-дау.
Р. Ғарипов.

Пугачев ғәскәренең яртыһынан күбен башҡорттар тәшкил иткән. 500 кешелек отряды менән иң алда Яманһары старшина, иртәгәһенә Кинйә старшина килеп ҡушылған. 1773 йылдың ноябрь айында Пугачев ғәскәренә Салауат килеп ҡушыла.

Салауат тураһында халыҡтың күп белеүен иҫәпкә алып, шуларҙы ғына әйтке килә.

Салауат иҫ киткес талантлы, бөтә яҡлап уңған егет булған. Ул бик иртә ғәҙәттән тыш һәләтле кеше булып өлгөргән. Халыҡ телендә Салауатты 14 йәшендә батыр булған, тиҙәр. Ә батыр исемен алыу ул заманда анһат булмаған, илдә батырҙар берәмләп кенә һаналған. 16 йәше лә тулмаҫ элек урыҫ властарының яманлыҡтарына ҡаршы актив көрәшкән өсөн уны атаһы Юлай менән бергә бығаулап ярты йылға төрмәгә ултыртҡандар. Юлай хәрби походҡа алынғанда, башҡа берәү түгел, ә 17 йәшлек Салауат волоста старшина булып ҡалған. 1773 йылдың октябрендә отряд

тоҙогәс, уның командиры итеп Юлай тағы Салауатты ҡуйған. Был ваҡытта инде САЛАУАТ батыр булып ҡына түгел, сәсән булып та танылып өлгөргән. Ул бик белемле булған: ғәрәп телен, шәрек әҙәбиәтен, үҙ халҡының тарихын яҡшы белгән һәм урыҫ телендә лә яҡшы һөйләшкән.

Пугачев Салауаттың ҡурҡыу белмәҫ батыр, оҫта ойоштороусы икәнен белеп алған, шуға күрә, полковник дәрәжәһе биреп, 19 йәшлек егетте Себер даруғаһына яңы отрядтар йыйырға ебәргән. Шуға ла халыҡ Салауатты данлап, маҡтап, күп кенә йырҙар, ҡобайырҙар ижад иткән.Бер генә миҫал килтерәйек:

Салауат батыр ир ине,
Менгән аты кир ине,
Яуға саҡырып өндәгәндә,
Тауыштары көр ине;
Ҡаршы килгән яуҙарға
Ҡаршы сығыр ир ине, ау,
Ҡаршы сығыр ир ине.

Батырыбыҙ тураһында, ҡот осҡос тыйыуҙарға ҡарамаҫтан, халҡыбыҙ бер нисә йырҙы һаҡлап алып ҡалған һәм беҙҙең көндәргә килтереп еткергән.

XXXX

Салауат нисә йәшендә?
Йәшел ҡамсат бүрке башында.
Булғадир булған, ай, Салауат
Егерме лә ике йәшендә.

Яланда йөрөгән йылҡының
Алалары бар ҙа, буҙы юҡ.
Яуҙарҙы ҡырған Салауат,
Атҡынайы ҡайтты, үҙе юҡ.

Йүрүҙән һыуы туғайы,
Сырлап ҡына оса турғайы.
Салауат менән Юлайҙың
Сыңғырайҙыр тимер бығауы.

Салауат йөрөгән кир аттың
Ялғынаһын кемдәр тараған?
Салауаттың һиҙгер күҙҙәре
Алыҫтарға текләп ҡараған.

XXXX

Салауатҡай килә ат уйнатып,
Ат уйнатып, Урал буйлатып.
Ҡылысҡайы үткер, уғы мәргән,
Дошман яуын ҡырҙы шаулатып.

Салауат батыр үткер ҡылысын
Йөрөтөр булған һәр саҡ билендә.
Халыҡ ирке өсөн ҡорбан булғас,
Даны йәшәй тыуған илендә.

XXXX

Салауат нисә йәшендә?
Йәшел ҡамсат бүрке башында.
Булғадир булған, ай, Салауат
Егерме лә ике йәшендә.

Салауат бара йыр йырлап
Батыр ғәскәрҙәре башында.
Дошмандарҙы ҡырған Салауат,
Исемкәйе Урал ташында.

Яндарым тарттым, уҡ аттым,
Беләккәйем ерге таянып.
Иҫ китерлек эштәр эшләнек,
Салауат тигән ирге таянып.

XXXX

Әкрәм Бейештең яҙыуынса, 1774 йылдың ноябрендә карателдәргә ҡаты һөжүм яһағандан һуң, Салауат иптәштәре менән отрядты таратырға, ләкин баш һалмаҫҡа ҡарар иткән. Улар

ваҡытлыса боҫоп торорға ла, яҙға сыҡҡас, ҡабат көрәш башларға булған. Ләкин уларҙың уйы тормошҡа ашмаған. Халыҡ араһында гел шымсылап йөрөгән мишәр старшинаһы Мөҡсин Әбдесәләмов, Салауаттың йәшенгән ерен белеп, ғәскәр килтергән. 1774 йылдың 25 ноябрендә карателдәр уны тотоп алған.

Тимер менән бығауланған Салауат каторганың таш ҡапсығында 25 йыл ултырып, 1800 йылдың 26 сентябрендә вафат булған. 46 йыл ғүмеренең 26 йылын ул ҡот оскос ғазаплы тотҡонда үткәргән. Шундай ҡаты яза уға үҙ ерендә үҙ халҡына ирек яулап, йән аямай көрәшкән өсөн генә бирелгән. Бөтә ғәйебе уның шул булған.

## Кантонлыҡ осоро

Билдәле булыуынса, 1798 йылдан башлап башҡорттар хәрби сословие итеп иғлан ителәләр, ә Башҡортостан кантондарға бүленә. Кантонлыҡ системаһы 1865 йылға тиклем йәшәй. 1798 йылдың апрелендә 11 башҡорт кантонлығы, 5 мишәр, 5 Ырымбур һәм 2 Урал казактары кантонлығы булдырыла. Аҙаҡ улар 28-гә еткерелеп, 1863 йыл тағы 11-гә ҡалдырылып, 1865 йылдың июлендә бөтөрөлөп ҡуялар.

Башҡортостанда кантонлыҡ системаһы Рәсәйҙең көньяҡ-көнсығыш сиктәрен нығытыу һәм башҡорттарҙы тағы ла нығыраҡ баҫылдырыу өсөн индерелә. Ә был ваҡытта башҡорттар бөлгөнлөктөң сигенә етеп, ғаиләләрен ас үлемдән ҡотҡарыр өсөн, балаларын ҡоллоҡҡа һата башлай. Башҡортостанға Ҡазан губернияһының татарҙары нык ағыла, помещиктар (алпауыттар) һаны күбәйеп китә. Килмешәк халыҡтар һан яғынан туҡтауһыҙ үҫә. Башҡорттоң хәлһеҙләнеүенә ҡарамаҫтан, урыҫ хөкүмәте уның тағы азатлыҡ яуына күтәрелеүенән ҡурҡҡан. "Батыр етәксе килеп сыға ҡалһа, башҡорттар, йәнәһе, "яңынан бола йәки фетнә күтәрергә әҙер" торған.

(Кантон системаһы Башҡортостанда совет осоронда ла - 1919 йылдан 1930 йылға тиклем районлар булдырғансы - йәшәп ала).

Ошо тарихи ваҡиғалар йырсы һәм лирик халыҡтың ауыҙ- тел ижадында сағылмай ҡалмай, әлбиттә.
Кантон башлыҡтары тураһында күп йырҙар сығарылған. Кантондар ҙа, халыҡса әйткәндә, төрлө булған: яҡшылары, яманлары, алдынғылары, кешелеклеләре, ҡатылары, һауалылары һ.б.

Әгәр ҙә тарихҡа күҙ һалһаҡ, беҙҙең мәшһүр уҡымышлыларыбыҙ - күпселек дворяндар затынан: кантон башлыҡтары, күренекле шәхестәр, мәҫәлән, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Мирсәлих Биксурин, Бурангол кантон, Ҡаһарман кантон, Әлмөхәмәт кантон, Ҡыуатов кантон, Өмөтбаев кантон, Азаматов кантон, Бүзекәев кантон һ.б. Мәҫәлән, Әлмөхәмәт кантон Ҡыуатовтарҙан IV кантондар быуыны. Ул 1844 йылда Ҡазан гимназияһын бөтә, европаса төплө белем алып сыға: тарих, география, биология, физика, математика, телдәр буйынса ныҡ белем ала. Ә 1848 йылда Ҡазандағы император университетына, медицина факультетына, уңышлы һынау биреп, уҡырға инә. Күп тә үтмәй, философия факультетының көнсығыш телдәре бүлегенә күсә. Бында ул латин, немец, француз, урыҫ телдәрен үҙләштерә, философия, тарих, география фәндәрен, урыҫ һәм көнсығыш әҙәбиәтен өйрәнә. Ҡазан университетын "отлично" билдәләренә генә тамамлағас, уға кандидатлыҡ диссертацияһы яҙырға рөхсәт итәләр; һәм ул уны яҙып, яҡлап, фән кандидаты дипломын ала.

Ҡыуатовтар - үҫәргән ырыуынан: Ҡыуат старшина → Бурангол кантон → Ҡаһарман кантон → Әлмөхәмәт кантон (атаһы Әхмәт сотник).

Бына ошо осорҙа, йәғни кантон системаһы хакимлек иткән йылдарҙа, башҡорттарҙы урыҫ ғәскәрендә хәрби походтарҙа ҡатнашырға һәм Рәсәй сиктәрен һаҡлау хеҙмәтен - 25 йыл тирәһе - атҡарырға мәжбүр итәләр. Ошо хәлдәр тураһында башҡорттарыбыҙ байтаҡ классик йырҙар ижад иткән, мәҫәлән: "Азамат", "Аҡмәсет", "Әрме", "Ҡыр ҡаҙҙары", "Карпат", "Манжур", "Перовский", "Һыр", "Уйыл" һ.б.

"Уйыл" йыры Ҡаҙағстандың Аҡтүбә далаларынан баш алып, Каспий (боронғоса Хазар) диңгеҙенә барып етмәйенсә, ер аҫтына киткән Уйыл йылғаһының исеме менән аталған. Хәрби хеҙмәттә саҡта, төрлө походтарҙа һәм хәрби экспедицияларҙа йөрөгәндә, башҡорт атлы ғәскәрҙәренә Уйыл йылғаһы аша йыш ҡына үтергә, ә күбеһенсә Уйыл крепосында хеҙмәт итергә тура килгән.

"Уйыл" йыры, һүҙҙәренән һәм тәрән драматизмлы көйөнән күренеүенсә, ана шул ауыр һәм бик оҙаҡ (сирек быуат) хәрби хеҙмәттә һәм походтарҙа йөрөгән һалдаттың күңел кисерештәрен, уйҙарын, тыуған ерен һағыныуҙарын тетрәткес итеп бирә. Йырҙың һүҙҙәре буйынса ике варианты бар.

I

Ике лә генә егет бесән саба
Уйыл буйҡайында ла сабында.
Ҡайҙа ла ғына йөрөмәй, ниҙәр күрмәй
Ир-егеткәй иҫән дә сағында.

Менгән генә атым, ай, кир булыр,
Тибенгеһе уның да тир булыр.
Урал буйҡайының аҫыл егете
Данҡайҙары сығыр ҙа ир булыр.

Уйылып ҡына аҡҡан Уйыл һыуы
Уйландыра уйсан да ирҙәрҙе,
Уйландырып ҡалмай, моңландыра,
Һағындыра тыуған да ерҙәрҙе.

II

Ҡурайсылар ҡурай, ай, уйнамаҫ,
Башҡорт ҡурайҙары булмаһа,
Егет тә генә кеше йыр йырламаҫ,
Йөрәгендә дәрттәр булмаһа.

Әрәмәгә керһәм, үлән һирәк,
Сәхрәләргә сыҡһам, ер еләк;
Эсемдә генә минең уттар яна,
Ник елкенә икән был йөрәк.

Арыҫлан да кейек һис ҡайғырмаҫ,
Ҡаршыһында бейек тау булһа;
Егет тә генә кеше һис ҡайғырмаҫ,
Ғәзиз башы уның һау булһа.

Уй һүҙенән яһалған тамырҙаш һүҙҙәрҙе килтереп китәйек:

уй - һуҙылып киткән түбән ер (уйһыу, уяҙ);

| | |
|---|---|
| уйһыу | уйыу |
| уйһыл | уйым |
| уйҡыл | уйылыу |
| уйпы | уйылтыу |
| уйпат | уйҙырыу |
| уйпаҙ | уйҙыҡлау |
| уйра | уйҙыҡланыу |
| уйһыулыҡ | уйһыллатыу |
| уйҡыт | Уйыл |
| уйҡым- уйҡым | |

Миҫалдар:

1. Яҙ миҙгелкәйҙәре еттениһә,
Уйҙан - уйға аға ҡар һыуы.
*(башҡорт халыҡ йырынан)*

2. Аҡты һыуҙар, ҡайҙа уй бар -
Шунда һыуҙар тулдылар.
*Ш. Бабич.*

## 1812 йылғы Ватан һуғышына ҡараған йырҙар

Бейеклек юҡ тыуған тауҙарымда,
Бөйөклөк бар кескәй халҡымда.
Р.Ғарипов "*Халҡым хаҡында*".

Билдәле булыуынса, 1812 йылғы Ватан һуғышында урыҫ халҡының еңеүенә башҡорттар тос өлөш индергәндәр. Башҡорт атлыларынан 28 полк төҙөлгән һәм уларҙың күбеһе Кутузов етәкселек иткән урыҫ армияһы составында Данциг (Польша),





Башҡорттар I Ватан һуғышында

Лейпциг һәм Веймар (Германия), Шатобриан һәм Париж (Франция) ҡалалары янындағы һуғыштарҙа ҡатнашҡан.

Сағыштырыу өсөн түбәндәге һандарҙы килтерәйек:
мишәрҙәр - 2 полк,
типтәрҙәр - 2 полк,
Ставрополь ҡалмыҡтары 1 полк биргән.

Башҡорт ғәскәрҙәре (9 полк) урыҫ армияһы составында Парижды алған. Французлар башҡорт һуғышсыларын мәргәнлектәре өсөн "Көнсығыш амурҙары" тип атай торған булғандар. (Амур - француз әкиәттәрендә уҡ-һаҙаҡ менән ҡоралланған батыр икән; боронғо Рим мифологияһында - уҡ-һаҙаҡ менән ҡоралланған ҡанатлы малай һынындағы мөхәббәт аллаһы).

Әйтергә кәрәк, һуғышҡа ебәрелгән ғәскәрҙе бөтә кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеү башҡорттоң үҙ елкәһендә булған. Ҡоралдары әүәлгесә уҡ-һаҙаҡ менән һөңгөнән торған, сонки урыҫтар ҙур башҡорт ғәскәренә утлы ҡорал тотторорға ҡурҡҡан. Шул уҡ ваҡытта улар командирҙы башҡорттан ҡуйырға ла ҡурҡҡан.

Ватан һуғышында күпләп һәм бик актив ҡатнашҡас, хайран ҡалырлыҡ батырлыҡтар күрһәткәс, был ваҡиғалар тураһында йырҙар сыҡмай булмаған.

## Любизар

1812 йылғы Ватан һуғышы тураһында сығарылған йырҙарҙың береһе - "Любизар" йыры. Уның килеп сығыуы тураһында шундай риүәйәт бар.

Бер саҡ, оло яуҙа ҡатнашып, башҡорттар ҙур батырлыҡ күрһәткәндәр. Шунан Ҡаһым түрәне Кутузов генерал үҙ янына саҡырып алған да уға: "Любезные мои башкирцы, молодцы!"- тип әйткән, ти. Ә башҡорттар, генералдың һүҙҙәрен әҙерәк үҙгәртә биреп, "Любезники, любизар, маладис, маладис" тип йыр сығарғандар, ти. Шунан тағы урыҫтар менән бергә французлдарҙы ҡыуып алып киткәндәр, ти.

"Любизар", беҙҙең ондәргә килеп етеп, халыҡ араһында киң таралған йырҙарҙың береһе булып йөрөй.

1. Беҙ һуғышҡа ингәндә,
Бәхилләштек барыбыҙ.
Беҙ һуғыштан сыҡҡанда,
Алдан сыҡты даныбыҙ.
Любезники, любизар,
Маладис, маладис!

2. Французлар килеп ингән
Мәскәү тигән ҡалаға.
Беҙҙең ғәскәр ҡыҫып алгас,
Сығып ҡасты далаға.
Любезники, любизар,
Маладис, маладис!

3. Наполеонға тәхет кәрәк,
Үҙ еренә һыймаған.
Мәскәүҙәргә килеп ингәс,
Ул да үҙен һынаған.
Любезники, любизар,
Маладис, маладис!

4. Французлар танынылар
Әрәсәйҙә үҙҙәрен.
Урыҫ, башҡорт ҡыҫмаҡлагас,
Таба (а)лмайҙар эҙҙәрен.
Любезники, любизар,
Маладис, маладис!

5. Мәскәүгә лә керҙек беҙ,
Парижды ла күрҙек беҙ.
Французлдарҙы еңгәндә,
Ер емертеп йөрөнөк беҙ.
Любезники, любизар,
Маладис, маладис!

6. Французлдарҙың ҡалалары
Урамдары таш ҡына.
Французлар етте инде
Үҙҙрене башына.
Любезники, любизар,
Маладис, маладис!



«Байыҡ» бейеүен Мөхәмәт Иҙрисов башҡара.

## Байыҡ

Ҡындан алып, алмас ҡылысымды
Урал ташҡайына ҡайраным
*Башҡорт халыҡ йыры "Эскадрон".*

Ватан һуғышына үҙенең алмас ҡылысын Урал ташҡайына ҡайрап киткән башҡорт егете, Кутузов армияһында Рәсәйҙе дошмандан азат итеүгә тоғро хеҙмәт итеп, тыуған еренә еңеү менән ҡайта. Әлбиттә, һәләк булғандар ҙа күп була. Ә еңеүселәрҙе халыҡ ҙур шатлыҡ менән ҡаршы ала.

"Байыҡ" йыры француз яуында еңеп ҡайтҡан арыҫлан кеүек егеттәргә маҡтау итеп сығарылған.

Француз, француз килә, ти,
Наполеоны түрә, ти,
Яуы еткән Мәскәүгә лә,
Буҫағала тора, ти.
Ай, һай, һай, һай,
Ғәййәрләнмәк була, ти,
һай, һай, һай, һай,
Юҡ итәм тип илеңде,
Бөтәбеҙҙән көлә, ти ҙә,
Буҫағанан керә, ти.

һай, азамат арыҫлан да,
Яуҙа дошман айҡаған,
Йөҙҙәрендә нуры балҡый,
Күп ерҙәрҙе байҡаған.
Ай, һай, һай, һай,
Түрҙән урын алығыҙ,
һай, һай, һай, һай,
һары балды һалығыҙ,
Арыҫландай батырҙарҙың
Арҡаһынан ҡағығыҙ.



Ҡаһым түрә ролендә Арыслан Мөбәрәков.

Ҡаһым түрә

Халҡыбыҙҙың мәшһүр йырҙарының береһе - "Ҡаһым түрә".

Ҡаһым түрә (Ҡасим Мырҙашев) талантлы полководец, башҡорт атлы частәре командирҙарының береһе була. Һуғышты бөтөрөп ҡайтып килгәндә, 35 йәшлек данлы батырыбыҙ Ҡаһым түрәне урыҫтар, башҡорттарҙың еңеүҙәге роленә һәм данына көнләшеп, Ҡаһым түрә Салауат кеүек булып ҡуймаһын тип, Владимир ҡалаһына еткәс, ағыулап үлтерәләр.

Ә халыҡ, бөйөк батырын хәтерендә мәңгеләштереп, үлемһеҙ "Ҡаһым түрә" тигән йыр сығара.

Ҡаһым түрә

Ҡаһым түрә менгән һор(о) юрғаның, вай кем,
Маңлайында булыр урайы.
Ҡаһым түрә яуап биргән сакта, вай кем,
Уң ҡулында уның ҡурайы.

Ҡаһым түрә данлы кеше ине, вай кем,
Әрме командиры ҡашында.
Ҡаһым түрә вафат булып ҡалды, вай кем,
Владимир губерна башында.

Ҡаһым түрә менгән һор(о) юрғаның, вай кем,
Бәкәлдәре уның аҡ ине.
Ҡаһым түрә фарман биргән саҡта, вай кем,
Әйтер һүҙкәйҙәре хаҡ ине.

Башҡынайым минең бик ауырта, вай кем,
Сәңгелдәтмәй барсы көймәмде.
Эскенәйем минең тулып бара, вай кем,
Ысҡындырсы комош төймәмде.

## Кантондар тураһында йырҙар

Башҡортостан административ-территориаль яҡтан кантонлыҡтарға бүленгән осорҙа (1798-1865) кантон башлыҡтарының бик күбенә ҡарата йырҙар сығарылған: "Ҡолой кантон", "Сибай", "Ҡаһарман кантон", "Абдулла ахун", ("Ҡылыслы ахун"), "Тохфәт", "Бүҙекәй" һ.б.

Был йырҙар һәм көйҙәр йә берәй кантон башлығының (халыҡ телендә - кантондың) теләген үтәү рәүешендә, уның ҡушыуы буйынса, шул даирәгә яҡын булған айырым йырсылар тарафынан сығарылған, йә кантондың теләгенә бөтөнләй ҡаршы рәүештә, халыҡ йырсылары тарафынан ижад ителгән.

Беренсе төркөмдәге йырҙар (йәғни яллап йә ҡурҡытып сығарылған йырҙар) - кантон башлығының үҙен һәм эшен маҡтау йырҙары.

Улар халыҡлашып китә алмаған, кантон башлығы территорияһында йырланғандар ҙа онотолғандар.

Ә икенсе төркөмдәге йырҙар - юғары талантлы, ысын халыҡ йырҙары. Уларҙа халыҡ кантон башлыҡтарына дөрөҫ кенә баһа бирә, уларҙың сифаттарын үткер итеп, асыҡ итеп характерлай.

Царизмдың тоғро ялсыһы булған бөтә кантон башлыҡтарының дөйөмләштерелгән тиҫкәре образы һүрәтләнгән йырҙарҙың иң күслөһө - һис шикһеҙ "Ҡолой кантон"дыр.

Фольклор материалдарына ҡарағанда, 25 йыл буйы кантон башында торған Мөхәмәтҡолой Кучуков (сығышы менән Силәбе өлкәһе Арғаяш районы Ҡолой ауылынан) үҙ заманында иң бай феодалдарҙың береһе булған. Миәс, Ҡараһыу йылғаларында ул 5 тирмән тотҡан, 5 000 йылҡыһы булған, повозкаһына 13 ат ектереп йөрөр булған.

Шул уҡ ваҡытта ул "ил күҙенән ҡанлы йәш ағыҙған" хөлөҡһоҙ түрә һәм ҡомһоҙ эксплуататор булып күҙ алдына баҫа.

## Ҡолой кантон

Ҡолой кантонды ла бай, тиҙәр,
Ҡамсат та ғына бүрке бар, тиҙәр.
Үҙ хөкөмдәре лә үҙ ҡулында,
Ни ҡылһа ла, ирке бар, тиҙәр.

Ҡолой кантондың да буйҙары
Буйға ғына үҫкән тармалай.
Ил күҙенән ҡанлы йәш ағыҙған -
Ҡолой кантон менән Ермолай.

Ҡолой кантон да бик уҡ ҡанһыҙ,
Бер һүҙ әйтһәң, ҡылыс ҡармалай.
Күп иркәйҙәрҙең дә башын юйҙы
Ҡолой кантон менән Ермолай.

Кантон да ғына кантон килә, тиҙәр,
Килгән кантондарҙан ҡаҡшаныҡ.
Яуыз кантондарҙы ҡуя икән
Рәсәй генә тигән батшалыҡ.

## Сибай

Үҙем үлгәс, йырым йырлап ҡайтһын,
Атым-санам ҡайтһын Уралға.
*Шәйәхмәт Сибаев.*

Халыҡ поэтик ижадта уҫал кантондарҙы шелтәләү, әрләү менән генә сикләнмәгән, ә тормошта ябай булған, халыҡ мәнфәғәтен

күҙәткән гәҙел кантондарҙы ла баһалаған, һәм ҡайһы бер йырҙарҙа "тоғро кантон", "ысын кантон" образы кәүҙәләнгән.

Быға миҫал итеп "Сибай кантон" йырын килтерергә мөмкин. Хәҙер ул "Сибай" тип кенә йөрөтөлә.

"Сибай" - лирик йүнәлештә сығарылған мәшһүр йыр. Тарихсыларҙың яҙыуы буйынса, "Сибай" исеме Атайсал ҡарттың 5-се быуынындағы Сибай ҡарттың исеменән алынған.

Пенсионер-уҡытыусы Ғ.Биишевтың (Күгәрсен районы, Мәҡсүт ауылы) "Совет Башҡортостаны" гәзитендә 1967 йылдың 4 мартында сыҡҡан "Сибай" тип аталған ҙур ғына мәҡәләһендә Атайсал ҡарттың тоҡомо, уның бер өлөшөнөң Күгәрсен районы Саньяп ауылында йәшәүе, Сибай кантон тураһында ентекләп яҙылған.

1667 йылғы ревизҙән һуң (башҡорттарҙың йән иҫәбен алған ревизиянан һуң) Атайсал ҡарттың нәҫел-тоҡомо йәшәгән ауылға Сибай исеме бирелә, сөнки Сибай, үҙ заманының алдынғы кешеһе булараҡ, ауылды төҙөүҙә, ревиз үткәреүҙә актив ҡатнашҡан.

Сибайҙың 10 улының береһе Утарбай була. Уның 1822 йылда тыуған улына ШӘЙӘХМӘТ тип исем ҡушалар. 1833 йылда Шәйәхмәт 11 йәшендә генә атайҙан етем ҡала, сөнки атаһын һөргөнгә ебәрәләр. Шунан Шәйәхмәтте Ырымбур яғына алып китеп, бер урыҫ мәктәбенә уҡырға бирәләр. Бында ул 5 йыл уҡый ҙа, әсәһе менән апайын һағынып, 1838 йылда Сибайға ҡайта.

Бер аҙҙан Иҫән ауылынан Биксурин Ҡотләхмәт исемле кантон Шәйәхмәт Сибаевты бисер (секретарь) итеп эшкә ала.

Шәйәхмәт ошонда өйләнә.

Ҡотләхмәт кантондың Фатима тигән уҡымышлы, үткер ҡыҙы була.Шәйәхмәт уны икенсе ҡатынлыҡҡа алырға ниәтләнә. Әммә Ҡотләхмәт кантон, быға асыуланып, 1848 йыл Сибаевты әрмегә ебәртә, ә ҡыҙын кейәүгә бирә. Фатима барыбер ире менән йәшәмәй; 1853 йыл, 5 йыл хеҙмәт итеп, Сибаев әрменән ҡайта. Уны Тамьян-Ҡатайға кантон итеп ебәрәләр. Ул был осорҙа ла Фатима менән бәйләнешен дауам итә, уға бағышлап йырҙар сығара.

Кантон булып эшләй башлағас та, Шәйәхмәт Сибаев, үҙ ауылына ҡайтып, 40 мискә ҡымыҙ әҙерләтә лә ҙур мәжлес ҡора. Шунда ул үҙе сығарған көйҙө Ирәндек буйын яңғыратып йырлап ебәрә. Ошо мәжлес урыны әле лә "Сибай билә́не" тип йөрөтөлә.

Сибаев Фатиманы Тамьян-Ҡатайға алып китә, ә тәүге ҡатыны Ғәмбәр Сибай ауылында ҡала.

1864 йыл был кантонлыҡ бөтөрөлә. Сибаевты Үрге Уралға поселковый атаман итеп билдәләйҙәр. Ләкин Сибаев унда ауырыуы арҡаһында бара алмай. Уның арҡаһында бер шеш сыҡҡан була.

Шуны ҡырҡтырғас, ул ауырып китә һәм вафат була. Сибаевтың ҡәбере Учалы яғында, "Атаяҡ-Миндәк" тигән ерҙә, тип һөйләгән Сибай ауылы кешеһе Иҙрисов Утарбай.

Сибай

Йәшел генә сана, зәңгәр дуға
Ектерһәнә, Фатимам, тур(ы) атҡа.
Атайсалға ҡайтып торор ҙа булһам,
Ирешер инем, Фатимам, моратҡа.

Һандуғастар һайрар, ай, ер түгел,
Кәкүк тә генә саҡырыр ил түгел.
Илама ла, Фатимам, ай, илама,
Йүгерә-атлап ҡайтыр ҙа ер түгел.

Ебәк кенә баулы күк ҡарсыға
Талпына ла микән, ҡош күреп.
Киң түшәккәйҙәрен тарҙар йәйеп,
Көтә микән Фатимам, төш күреп.

Йәшел генә сана, киң үрәсә,
Үрәсәгә баҫып һөйләшә.
Яҙыуҙары уның, ай, ғәрәпсә,
Һөйләшеүе уның ғәҙәтсә.

## Ҡасҡындар тураһында йырҙар

Башҡорт тарихи классик йырҙарының ҙур төркөмөн ҡасҡындар тураһындағы йырҙар тәшкил итә: "Буранбай", "Бейеш", "Шәрәфетдин", "Ирәле", "Ғәҙебәк Насыр", "Юныс Йүркә", "Сәләй", "Сираев" һ.б. Уларҙың тыуыуына XVIII быуат баш күтәреүҙәренең бер-бер артлы аяуһыҙ ҡанһыҙлыҡ менән баҫтырылыуы, эҙәрләүҙәрҙең косәйеүе, өҫтәүенә илдә ҡанһыҙ кантондар идаралығының ойошторолоуы сәбәп була.

Йырҙарҙа "ҡасҡын" төшөнсәһенә тәрән социаль мәғәнә һалынған. Күпселек йырҙарҙа һүрәтләнеүенсә, ҡасҡын - ул үҙ мәнфәғәте осон ҡайҙа етте шунда юл баҫып, кемде етте шуны талап йөрөүсе оғро, бур түгел. Был ике төшөнсә йырҙарҙа бер-береһенә

ҡапма-ҡаршы ҡуйып һүрәтләнә. Мәҫәлән, был турала "Бейеш батыр" йырында ап-асыҡ әйтелгән:

Һор юрғаҡай менеп елеп үттем
Баяр ғына баҫҡан ерҙәрҙе.
Оғро ғына тиеп хурламағыҙ
Ирәндеккә ҡасҡан ирҙәрҙе.

Тимәк, ҡасҡын барынан да элек - йәшәп килгән тәртиптәргә ризаһыҙлыҡ белдереп ҡаршы сыҡҡан осон хөкөм ителгән йә булмаһа, баструктан ҡасып ҡайтып, власть кешеләренән йәшеренеп йөрөп, социаль тигеҙһеҙлеккә ҡаршы стихиялы һәм яңғыҙаҡ көрәш алып барыусы кеше.

Ҡасҡын йырҙарының нигеҙендә халыҡтың колониаль һәм милли иҙеүгә ҡаршы быуаттар буйы дауам иткән азатлыҡ көрәше мотивтары ята. Ошо көрәш башында торған, халыҡ араһынан күтәрелеп сыҡҡан яңғыҙаҡ батырҙар ҡасҡын йырҙарының төп ижадсылары булып сығыш яһай. Ҡасҡын йырҙарының персонаждары - тормошта ысынлап та булған кешеләр.

## Буранбай

"Буранбай" йырында 1798 йылғы иҫәп буйынса 6-сы кантондың 1-се Бөрйән волосы старшинаһы булып торған Буранбай Ҡотосов тураһында һүҙ бара.

Халыҡтың власть органдарынан ризаһыҙлығын көсәйтеүгә булышлыҡ иткәне өсөн Буранбайҙы үҙенең писаре Ибраһимов Айсыуаҡ менән 1820 йыл Себергә һөргөнгә ебәрәләр. Буранбай унан ҡасып ҡайта һәм ауылына яҡын урмандарҙа, ҡая таштар араһында йәшеренеп ята.

Буранбайҙың ысын исеме Йәркәй булған. Һөргөндән ҡасып ҡайтҡас, Йәркәй үҙен танып белгәндәй ерҙәрҙә Буранбай исеме менән йөрөй. Йырында ул былай тип әйтә ошо турала:

Минең исемемде һораһағыҙ,
Ялған исемем минең Буранбай.
Бер аҙ эштәремде ғәфү итмәй,
Ебәрҙеләр мине, ҡуралмай.

Буранбай - ысын мәғәнәһендә сәсән, йырсы-импровизатор, ҡурайсы булған. "Буранбай" йыры - киң диапазонлы (ике октаванан артыҡ), ғәжәп көслө, тетрәткес йыр. Уны һәр йырсы ла башҡара алмай. Ул хаҡлы рәүештә башҡорт музыкаль поэзияһының ғына түгел, ә донъя сәнғәтенең шедевры була ала.

Табаҡ та ғына табаҡ, ай, аҡ ҡағыҙ
Буранбайҙың яҙған да хаттары.
Буранбайҙың яҙған хатын уҡып,
Зар илайҙар ауыл ҡарттары.

Буранбайҙың аты, ай, кирме ине,
Серге аҫҡайҙары ла тирме ине?
Буранбай ҙа менән, ай, Ибраһим
Себерҙәргә китер ҙә ирме ине?

Алыҫта ғына алыҫ , ай, күренгән
Юшатырҡай башы ла Аҡбейек.
Буранбай ҙа китте, иле ҡалды,
Илкәйенә булды ла ҙур көйөк.

Буранбайҙын ғына, ай, ҡылысын
Ҡомартҡыһы итеп тә ҙурлағыҙ.
Буранбайҙың ғына, ай, йырҙарын
Иҫтәлеге итеп тә йырлағыҙ.

Буранбай ҙа Себер китеү менән,
Тыныр микән баярҙың ерҙәре?
Буранбай ҙа Себер китеү менән,
Баҫылыр микән илдең дә ирҙәре?



# Каруанһарай

XIX быуаттың беренсе яртыһында, башҡорт ғәскәрҙәренең ил алдында күрһәткән хеҙмәттәре иҫтәлеге итеп, Ырымбурҙа Каруанһарай һалырға булалар. Уны хәрби губернатор В.А. Перовскийҙың инициативаһы менән А.П.Брюлловтың проекты буйынса 1838-1844 йылдарҙа төҙәләр. Төп маҡсаттары - башҡорт-мишәр ғәскәренең командующийе канцелярияһын урынлаштырыу һәм башҡорттарға йоҡлап китеү өсөн урын әҙерләү була. Шул уҡ ваҡытта бинаның бер өлөшөндә башҡорт балаларын төрлө һөнәргә өйрәтә торған мәктәп асыу маҡсаты ҡуйыла. Шуға күрә был йортто һалыу сығымдары, шулай уҡ уны кәрәкле төҙөү материалдары менән тәьмин итеү дәүләт иҫәбенә түгел, ә башҡорт халҡының үҙенә йөкмәтелгән.

Ләкин, төҙөлөп бөткәс, Каруанһарай бөтөнләй башҡа маҡсатҡа файҙаланыла башлай: бер өлөшөнә башҡорт ғәскәрҙәре командующийенең канцелярияһы урынлаштырыла, ҡалған өлөшө казарма ителә.

Башҡорттарҙан һәм бер аҙ мишәрҙәрҙән йыйылған аҡсаға (ҡыҫҡа ваҡыт эсендә 30 мең һум аҡса йыйылған), уларҙың үҙ көстәре менән һалынған йорттоң башта иғлан ителгәнсә файҙаланылмауы халыҡта ҙур ризаһыҙлыҡ тыуҙырған. Урындағы власть, халыҡтың тулҡынланыуынан ҡурҡып, бер нисә йыл буйына

“Каруанһарай әҙер түгел әле, тиҙҙән асыласаҡ” тип алдан килә. Ул 1846 йылдың 30 авгусында ғына Николай I батшаның тыуған көнөнә тура килтереп асыла. Каруанһарайҙа башҡорттар менән етәкселек итеүсе учреждение, килгән-киткән кеше өсөн ҡунаҡхана, мастерская, башҡорт балалары өсөн мәктәп урынлаштырыла.

19 йылдан һуң, 1865 йылдың 14 май указы буйынса, башҡорт атлы ғәскәрҙәрен тотоу бөтөрөлгәс һәм тағы 2 йылдан һуң башҡорттар крәҫтиән хәленә күсерелгәс, Каруанһарай башҡорттарҙан тартып алына һәм унда губерна һәм ҡала управлениеһының бөтә административ аппараты урынлаштырыла. Был ваҡытта инде Һарай Башҡортостан урмандарынан килтереп ултыртылған ҙур ағас баҡса менән дә уратып алынған була.

Башҡорттарҙың Каруанһарайҙы халыҡ йорто итеп файҙаланырға тырышып “эш ҡуҙғатып”, губернаторға протест ҡағыҙҙары яҙып йөрөүҙәре бер ниндәй ҙә һөҙөмтә бирмәй. Меңләгән кеше ҡул ҡуйған протест ҡағыҙына яуап урынына Ырымбур генерал-губернаторы (1865-1881) Крыжановский Николай Андреевич (1818-1888) Өфө губернаторына былай тип яҙа: “Башҡорттарҙы Каруанһарайҙы үҙҙәренә ҡайтарып алыу уйынан туҡтатыу сараһын күреү өсөн тиҙ генә өйәҙ исправниктарығыҙға тейешле йәшерен приказ биреүегеҙҙе һорайым... Был турала эш башлап йөрөүселәрҙе хөкөмгә тартыу өсөн ҡаты тикшеренеүҙәр булыр”. Крыжановский, Каруанһарайҙың “мосолманлыҡ билдәһен” бөтөрөү уйы менән, ундағы таш мәсетте ҡаланың икенсе урынына күсертеп һалдырырға ла уйлай. Әммә эске эштәр министры Валуев, был хәлдең башҡорттарҙа ризаһыҙлыкты тағы ла көсәйтәсәген һиҙеп, рөхсәт бирмәй.

Бына шулай төп башына тағы ла ултыртыла башҡорттар. (Шуныһы ҡыҙыҡ: күп ерҙәрҙе үҙләштергәнен, туғандарына бушлай ер таратҡанын һ.б. ҡомһоҙлоҡтарын Өфө һәм Ырымбур губерниялары сенат ревизияһы тикшереп, Крыжановскийҙы 1881 йыл эштән ҡыуалар).

Каруанһарай тарихы 1773 йылда ғәйнә башҡорто, рудасы Исмәғил Тасимов астырған тау училищеһы менән булған хәлде ҡабатлай.

Күп көс һәм аҡса түгеп, ауыр-оҙон юлдар йөрөп, әбей батшаға инеп, Тасимов башҡорт балалары өсөн тау училищеһы асырға ниәтләнә. Уны, Тасимовтың һорауы буйынса, Йоҡ заводы янында түгел, ә Санкт-Петербургта асырға бойора әбей батша. Училище асыла, уҡытыусылар Исмәғил Тасимов иҫәбенән эш хаҡы алып эшләйҙәр, әммә училищеның ишектәре башҡорт балаларына ябыҡ була, хатта унда Тасимовтың үҙ улдарын уҡытыу ҙа насип булмай.

“Батшалар уҡымышлы булырға теләгән башҡорттарға һабаҡты шулай уҡыттылар”, - ти Ғ.Хөсәйенов. Хәҙерге көндә Тасимов астырған тау училищеһы Г.В. Плеханов исемендәге тау институты тип атала, ә астырыусының исеме мәңгелеккә юғалған.

1918 йылдың февралендә И.В.Сталин ошондай күрһәтмә бирә: “Просим опубликовать во всеобщее сведение, что по решению Народного Комиссариата по делам национальностей Башкирский народный дом и мечеть под названием “Караван-Сарай” в Оренбурге передается в полное распоряжение башкирского трудового народа в лице Оренбургского военно-революционного комитета. 1918 г., 14 февраля”.

Ләкин был күрһәтмә үтәлмәй.

Халыҡ һаман да Каруанһарайҙы үҙенә ҡайтарыуҙы һорай, ләкин бөгөнгө хөкүмәт етәкселәре лә, нәҡ 150 йыл элек кеүек, ул законлы талапҡа, һаңғырау кеүек, битараф ҡала килә.

“Каруанһарай” тигән аҫыл көйлө һәм айырыуса камил поэтик текслы йырҙа халыҡ ана шул вәғәҙә ителгән йәмәғәт бинаһының аяныслы тарихын күрһәтә. Йыр ике вариантта йөрөй.

I

Айҡай ҙа ғына сайҡай, таштар вата,
һай кем, таштар вата,
Каруан да ғына һарай, ай, һалырға,
һай кем, ай, далала.

Торлаҡ ҡына булыр, яуҙан ҡайтһа,
һай кем, яуҙан ҡайтһа,
Атлы ла ғына, яуға, ай, ятырға,
һай кем, ай, ҡалала.

Каруан да ғына һарай, ай, асылғас,
һай кем, яуҙан ҡайтҡас,
Кантондарға булды, ай, фарман шул,
һай кем, ос йыл тулғас.

Кантондар ҙа барыһы фарман алғас,
һай кем, фарман алғас,
Штатский булып, ай, ҡалдылар
һай кем, ҡылыс һалғас.

Каруан да һарай, башы ҡалай,
һай кем, башы ҡалай,
Һалған да ғына уны, ай, атайҙар,
һай кем, яу ботҡанда.

Майор ҙа ғына илгә фарман бирҙе,
һай кем, фарман бирҙе,
Атлы ла ғына яуға таралырға,
һай кем, яй киткәнгә.

XIX быуат аҙаҡтарында йыр социаль-героик йөкмәткенән лирик темаға күсә.

II

Айҡай ҙа ғына сайҡай керҙәр йыуа,
һай кем, керҙәр йыуғанда,
Талмай микән уның беләккәйҙәре,
һай кем, сайҡағанда.

Күрше генә тороп, күрешә йөроп,
һай кем, күрешә йөрогәндә,
Янмай микән уның йөрәккәйҙәре,
һай кем, кис ятҡанда.

Яуҙа ғына йөроп, һауҙар ҡайтһам,
һай кем, һауҙар ҡайтһам,
Алам да ғына тинем, һүҙҙәр бирҙем,
һай кем, ай, киткәндә.

Яуҙа ғына йөрөп, һауҙар ҡайтһам,
һай кем , һауҙар ҡайтһам,
Ташлап та ғына киткән, һүҙен боҙған,
һай кем, көн еткәндә.

# Рус-япон һуғышы

## Порт-Артур

Порт-Артур - Ҡытайҙың Ляодун ярымутрауының иң көньяҡ нөктәһендә урынлашҡан ҡала. Уның үҙ исеме - Люйшунь.

1898 йылдағы конвенсия (килешеү) буйынса Рәсәй уны ваҡытлыса арендаға ала. 1904 йылдың ғинуарында япондар Порт-Артурҙа торған урыҫ эскадраһына ҡапыл һөжүм итәләр. Шунан урыҫ-япон һуғышы башланып китә. Һуғыш 5 ай буйы бара. Урыҫ армияһы еңелә. Был һуғышҡа ла, һәр ваҡыттағыса, бик күп башҡорт алына. Бик ҡаты һәм ҡанлы була һуғыш. Башҡорттоң күптәре Рәсәй мәнфәғәте өсөн яуҙа баш һала. Ошо тарихи ваҡиға тураһында башҡорттар "Порт-Артур" тигән йыр сығара. (Элекке Порт-Артур хәҙер үҙ исеме менән Люйшунь булып йөрөй).

Порт-Артур тигән таш ҡала
Күп ҡалаларға баш ҡала,
Һары диңгеҙ буйҙарында
Ҙур ҡалаларҙан һанала.
  Ай-һай, Порт-Артур,
  Була торғайның матур.

Порт-Артур тигән ҡалаға
Япондар туп аталар,
Аямай дошман, аямай,
Таш ҡоймаһын ваталар.
  Ай-һай, Порт-Артур,
  Була торғайның матур.

Дошмандарҙан уны яҡлап,
Күп ирҙәр башын һала,
Ирҙәр үлә, башын һала,
Бөтмәҫ дандары ҡала.
  Ай-һай, Порт-Артур,
  Була торғайның матур.

Япондар туп аталар,
Порт-Артурҙы ваталар,
Ҡайһы аяҡһыҙ, ҡайһы ҡулһыҙ,
Ҡысҡырышып яталар.
  Ай-һай, Порт-Артур,
  Була торғайның матур.

Диңгеҙ өҫтө ҡып-ҡыҙыл ҡан,
Эркелеп үлек аға.
Ирҙәр үлә, башын һала,
Ботмаҫ дандары ҡала.
Ай-һай, Порт-Артур,
Була торғайның матур.

## Илсе Ғайса

Урыҫ-япон һуғышы ерлегендә тыуған тағы бер йыр бар, дөрөҫөрәге, бер кеше исеме менән йөрөгән ике йыр бар: береһе "Ғайса", икенсеһе "Илсе Ғайса".

Кем булған һуң ул Ғайса?

Үткән быуат урталарында Туңғатар волосы (хәҙерге Учалы районына ҡарай) Шәрип ауылында Хәйбулла Рәсулев тигән бер ярлы башҡорт йәшәгән. Уның Фәтхулла һәм Зәйнулла тигән улдары булған. Малайҙар бик зирәк булғас, аталары уларҙы нисек тә уҡытырға тырышҡан.

Зәйнулла аҙаҡ атаҡлы хәҙрәт булып китә. Ағаһы Фәтхулланың ике улы була - Ғайса менән Муса. Малайҙар, Зәйнулла ағаһының "Рәсүлиә" мәҙрәсәһендә уҡып, икеһе лә ахун (мулланан юғары) исемен алырға ирешә. Ғайса Әүеш, Шәрип, Ялсығол ауылдарында ахун һәм мөҙәрис (өлкән уҡытыусы) булып эшләгән, мәҙрәсәлә уҡытҡан, ә Муса Ахун ауылында эшләгән.

1904 йылда урыҫ-япон һуғышы башланғас, Ғайса Рәсулев үҙ теләге менән яуға киткән һәм мосолман, башҡорт һалдаттарының баш муллаһы итеп тәғәйенләнгән. Ул бында мосолман һалдаттарының рухын күтәреү менән генә шөғөлләнмәгән, үҙе лә һуғышта ҡатнашҡан, ҙур батырлыҡтары өсөн иң юғары награда - Георгий тәреһе ордены менән бүләкләнгән һәм юғары хәрби чин алған.

Һуғышта йөрөгәндә, Ғайса ахун тыуған иләндә ҡустыһы Музаның вафат булыу хәбәрен ишеткән. Ғайса был хәлде үтә ауыр кисергән. Ҡайғы-хәсрәтен күпмелер баҫыр өсөн, ҡустыһына бағышлап бәйет һәм мөнәжәт сығарған, уларҙы хат менән тыуған иленә, тол ҡалған килененә ебәргән. Шул шиғри яҙмалар Мусаның ҡыҙы Сәлимә инәйҙә бер дәфтәр көйө һаҡлана, тип яҙғайны элегерәк журналист Рәүеф Насыров.

1986 йыл 7 декабрҙә сыҡҡан "Совет Башҡортостаны" гәзитендә был йырҙың 22 куплеты бирелгән.

Нигә Ғайсаны халыҡ илсе Ғайса тип тә йөрөтә?

Сөнки халыҡ Ғайса ахунды үҙ мәнфәғәтен яҡлар, ер-һыу өсөн низағтарҙы хәл итешер ил-йорт ходатайы, илсеһе итеп йөрөтөр булған. Башҡортостандың көнсығыш аймаҡтарында ниндәй генә яуаплы эштәр килеп тыумаһын, халыҡ уны - яу батырын, урыҫса ла, төркиәсә лә яҡшы белгән уҡымышлы улын - үҙенең илсеһе итеп ебәргән. Шул уҡ ваҡытта Ғайса Рәсүлев ижадында шағир дәрәжаһенә тиң һүҙ оҫтаһы булған.

Ғалимдар тағы бер асышҡа тап булалар: башҡорт ғалимы һәм яҙыусыһы Риза Фәхретдиновтың ҡулъяҙмалар коллекцияһы араһында Ғайса Рәсүлевтың урыҫ-япон һуғышы тураһында яҙылған бер ҙур шиғыры, ҡустыһы Мусаның үлеменә бағышланған бәйете - үҙ ҡулы менән яҙылған ҙур яҙмалары табыла.

Шулай итеп, Ғайса - илсе Ғайса ғына түгел, ә шағир Ғайса ла булған.

## Илсе Ғайса

Аҙаштырған болан балаһылай,
Яңғыҙ башым ситтә интегәм.
Көндәрен дә төнөн йөрәгем яна,
Иҫемә төшһә тыуған илгенәм.

Йүгереп кенә мендем тау башына,
Ултырҙым да ҡара ташына.
Һау-сәләмәт ҡайтһам Уралыма,
Тарих яҙыр инем ташына.

Ҡара ҡытат еләң, ай, иңемдә,
Ҡара ебәк билбау билемдә.
Башҡайҙарым ситтә йөрөһә лә,
Күңелдәрем тыуған илемдә.

## Ғайса

Оят булмаҫ микән кой койләргә
Беҙҙең кеүек аҫыл ирҙәргә?
Йырлау ғына түгел, иларһың да -
Ғәзиз башың йыраҡ илдәрҙә.

Ҡаҙ бәпкәләре һары икән,
Теҙелеп-теҙелеп һыуға бара икән.

Йөрәк баштарына ҡан һауҙырған
Йөрәк ярып сыҡҡан бала икән.

## Рәсәй менән II һәм III Килешеүҙәр

Башҡорттоң тарихын йырҙар аша күҙаллағанда ғына ла, шундай һорау тыумай булмай: тыуған илен ҡомһоҙ баҫҡынсыларҙан һаҡлау өсөн үлемесле һуғыштар, 5-6-шар йөҙ ауылдарҙың 15-20 йыл һайын үртәлеүҙәре, ҡанға батырып халыҡты язалауҙар һәм ҡырыуҙар, экономик фәҡирлек һәм ҡоллоҡ кимәленә төшөүҙәр, быуаттар буйына яттарҙан иҙелеү һәм таланыу, алданыу ғазаптарын кисереү, батырҙарҙы һәм ил ағаларын юғалтыу ҡайғылары, аслыҡтан һәм ауырыуҙан ҡырылыу, ғүмер баҡый төрлө һуғыштарҙа ҡорбандар биреү - ошо көнгә тиклем халыҡ булып һаҡланып ҡалыу өсөн ниндәй көстәр ярҙамлашҡан беҙгә?

Тимәк, Рәсәй менән төҙөлгән I Килешеү тураһында һығымта түбәндәгесә була: Рәсәй, Иван Грозный аренанан киткәс (үлгәс), Килешеүҙе үтәү генә түгел, уны тупаҫ боҙоп, Башҡортостанды ҡоллоҡ иленә әйләндерә.

Башҡортостандың Рәсәй менән Икенсе Килешеүе 1919 йылдың 20 мартында була. Ул “Соглашение центральной Советской власти с Башкирским правительством о Советской Автономной Башкирии” тип исемләнә. Килешеү Башҡортостан республикаһының төҙөлөүен нығыта, Башҡортостан Рәсәйҙең автономиялы өлөшө тип иғлан ителә, унда властың тулыһынса автономиялы республика ҡулына (башҡорт хөкүмәтенә) күсеүе әйтелә. IX параграфында башҡорт армияһы төҙөү кәрәклеге билдәләнә. Башҡортостан федерацияның башҡа республикалары менән бәйләнешкә инә ала, тиелә. Был килешеүҙә бер генә сикләү була: тимер юлдар, заводтар, рудниктар Мәскәү ҡарамағында ҡала. Һәм шуныһы ла мөһим була: килеп сыҡҡан мәсьәләләр Мәскәү командаһы менән түгел, ә ике яҡтан һөйләшеүе аша хәл ителергә тейеш була.



Зәки Вәлиди

Шулай итеп, Икенсе килешеү беҙҙең республикаға киң генә политик һәм социаль-экономик хоҡуҡтар һәм реаль автономия вәғәҙә итә.

Ләкин... был Килешеү 14 ай ғына ғәмәлдә була. РКП(б)-ның Үҙәк Комитеты тәҡдиме буйынса бер яҡлы рәүештә, Башревкомдың фекеренә ҡаршы, Рәсәй етәкселеге, 1919 йылғы килешеүҙе тупаҫ боҙоп, 1920 йылдың 19 майында "О государственном устройстве Автономной Советской Башкирской Республики" тигән декрет ҡабул итә. Уның буйынса Башҡортостан политик һәм экономик хоҡуҡтарынан мәхрүм ителә. Бөтә политик, экономик һәм финанс органдары үҙәккә буйһондорола. Ә Башҡортостан ҡарамағында тик икенсел административ функциялар ғына ҡалдырыла. Шулай итеп,



Мортаҙа Рәхимов - Башҡортостандың президенты.

автономия фикцияға, ә Мәскәү - автономияларҙы үҙ тырнағында тотҡан һөлөк-үҙәккә әйләнә.

Бөйөк Зәки Вәлиди Ленинға яҙған хатында былай ти: "Многоуважаемый Владимир Ильич! Будьте осторожны, может быть, у истоков совершенных ошибок стоите Вы сами".

Зәки Вәлидиҙең, йәш булһа ла, алдан күрә белеүенә хайран ҡалмай мөмкин түгел.

СССР тигән тоталитар илдең диктаты һәм тырнаҡтары аҫтында, колониаль хәлдә 70 йылдан ашыу йәшәп алдыҡ. Тормош милли мәсьәләләргә ике йөҙлө, формаль-бюрократик мөнәсәбәттең төптән хата булыуын иҫбатланы. Һуңғы йылдарҙа, СССР тарҡалғас, милли дәүләтселекте ҡороу принциптарын яңыртыу өсөн милли хәрәкәттәр башланды.

Башҡортостан да, әлбиттә, ситтә ҡалманы. Ҡыҙыу бәхәстәр, политик алыштар аша 1990 йылдың 11 октябрендә - Башҡортостан дәүләтенең суверенитеты тураһында Декларация ҡабул ителде. 1993 йылдың 12 декабрендә Башҡортостан Республикаһының беренсе Президенты һайланды. Был яуаплы вазифаға халҡыбыҙ икеләнмәйенсә Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовты һайланы. 1993 йылдың 24 декабрендә яңы Конституция раҫланды.

Ә 1994 йылдың 3 авгусында Рәсәй менән Башҡортостан араһында төҙөлгән Килешеү (Башҡортостан тарихында III Килешеү) республикабыҙ тормошонда, уның үҫешендә гәйәт ҙур тарихи әһәмиәтле документ булды. Яңы Конституция илебеҙ тарихында яңы осор асты. Иң мөһиме шулдыр: Конституцияның III бүлегендә Башҡортостан Республикаһы - суверенлы дәүләт" тип әйтелә.

Был Конституцияла беҙҙең милләтебеҙҙең үҙбилдәләнеше, Рәсәй менән мөнәсәбәттәрҙе ҡороу принциптары бик асыҡ итеп яҙылған.

Хәҙерге көндә хөрмәтле Президентыбыҙ етәкселегендә күп милләтле Башҡортостаныбыҙҙың социаль-экономик һәм мәҙәни үҫеше комплекслы программа буйынса бара, халыҡ-ара бәйләнештәр үҫә, халыҡтар дуҫлығы нығына, йәшәү кимәле күтәрелә, фәндең үҫеүенә киң юлдар асыла, йәш быуынға белем биреүгә иғтибар арта бара.

Шулай итеп, XXI быуат башында илебеҙ, ниһайәт, берҙәм, федератив, демократик, үҙаллы дәүләткә әүерелде.

Тыуған илебеҙгә артабан тыныслыҡ, уңышлы юлдар насип булһын.

## Башҡорт иленә ҡобайыр

Розалия Солтангәрәева

(Өҙөк)

Бер тигәндә, ни яман? -
Рухы һүнгән ил яман; -
Ике тигәндә, ни яман? -
Теле үлгән ил яман;
Өс тигәндә, ни яман?
Сәсәне юҡ тел яман
Дүрт тигәндә, ни яман? -
Дәртен күмгән ир яман,

Дарманы буш ир яман; +
Биш тигәндә, ни яман? -
Батыры юҡ ил яман;
Алты тигәндә, ни яман? -
Аҙға күнгән күп яман.

Аҙмаһын, тип, ошо алтыға,
Ҡалмаһын, тип, илһеҙ көнгә,
Илем өсөн мин янам.
Оран һалып, мин янам!
Оран һалып, мин янам!

## Ҡулланылған әҙәбиәт :

1. Башҡорт халыҡ ижады. Йырҙар - Өфө, 1974

2. Ә.И. Харисов. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы - Өфө, 1965.

3. К.Дияров. Сал Уралдың моңдары. - Өфө,1988

4. С.Галин. Йылдар һәм йырҙар. - Өфө, 1967

5. С.Галин. Тел асҡысы халыҡта. - Өфө, 1993

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ


| | бит |
|---|---|
| Үҙаллылыҡ яулау юлында | 3 |
| Башҡорт яуҙары | 7 |
| Кантонлыҡ осоро | 19 |
| 1812 йылғы Ватан һуғышына ҡараған йырҙар | 22 |
| Кантондар тураһында йырҙар | 29 |
| Ҡасҡындар тураһында йырҙар | 32 |
| Каруанһарай | 35 |
| Рус-япон һуғышы | 39 |
| Рәсәй менән II һәм III Килешеүҙәр | 42 |
| Ҡулланылған әҙәбиәт | 47 |
| Йөкмәткеһе | 48 |

Өфө - 1998